*Таңсулпан САФИНА*

# Уңған кеше шул булыр...


*Рамазан Исмәғил улы Үтәғолов*

Рамазан Исмәғил улы Үтәғолов менән ныҡлап танышып китеүем минең Сибай ҡалаһына килеп, ҡала муниципаль телевидениеһының башҡорт редакцияһы редакторы булып эшләй башлаған ваҡытҡа тура килә. 1995 йыл. Гөрләп, шаулап үткән I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң яңы һулыш алып, ең һыҙғанып республикабыҙҙың үҙаллылығын нығытыу, артабан да милләтебеҙҙе, уның телен, мәҙәниәтен яңы баҫҡысҡа күтәреү өсөн эшкә тотонған мәл. Учалыла йәшәп, ошо юҫыҡта эшләп, байтаҡ тәжрибә лә тупланған, әммә Сибай, тыуған ер булһа ла, минең өсөн әлегә серле йомғаҡ. Арҡа терәр, таяныр кешеләрен дә белеп бөтмәйем. Шул саҡта минең кабинетҡа оҙон ғына буйлы, зыялы ҡиәфәтле оло йәштәрҙәге ир килеп инде. Ҡайҙа күрҙем әле мин уны?

Иҫкә төшә... Эйе, Ҡоролтайҙа Сибай ҡалаһы делегаттары араһында ул бар ине. Тағы... Республикабыҙҙың көньяҡ районларынан үҙаллылыҡ өсөн көрәшкән кешеләрҙе йыйып, йыйын үткәрелгәйне. Унда ла ошо ағай...

Миңә ярҙамға килгәндәй, ағай кеше үҙе телгә килде:

— Мин Рамазан Үтәғолов булам. Бына, танышып сығырға килдем.

Теләктәш, рухташ кеше менән аңлашыу өсөн оҙон-оҙаҡ хәбәр сорытыу кәрәкмәй — уртаҡ телде бик тиҙ таптыҡ. Тәүге осрашыуҙа уҡ Сибай ҡалаһында Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың хәтер һәм ҡәҙер кисәһен үткәреү планын төҙөнөк. Һәм үткәрҙек тә. Кисә Сибай ҡалаһының үҫмерҙәр һәм балалар ижад йортонда күтәренке шарттарҙа үтте, телетапшырыу әҙерләп, ҡала телевидениеһы аша ла күрһәттек. Артабан Сибай сәсәнгә арналған кисә (Иҫке Сибай ауылында) ойошторолдо. Шулай уҡ телевидение аша күрһәтелде. Яҙыусы Рамазан Өмөтбаевтың исемен мәңгеләштереү эше инде мин Сибай Яҙыусылар ойошмаһына эшкә күскәс дауам ителде. Рамазан Исмәғил улы яңы идеялар менән килде. Баймаҡта Шәмсетдин Ғафаров, Абдулла Сәйедул, Мөхтәр Байымовҡа арналған юбилей байрамдары үтһенме — барыһының да башында Рамазан Исмәғил улы Үтәғолов һәм уның фекерҙәштәре торҙо. Әле Сибай ҡалаһының иң ҙур урамдарының береһе Әхмәтзәки Вәлиди исемен йөрөтә һәм уны Әхмәтзәки Вәлидигә ҡуйылған һәйкәл биҙәй

икән — бында ла уның өлөшө ҙур. Темәстә Вәлидигә һәйкәл асыу, Сибайҙа Салауатҡа бюст ҡуйылыу — былар береһе лә елдән еленләп килеп сыҡҡан уңыштар, ҡаҙаныштар түгел, бәлки Рамазан Үтәғолов кеүек үҙ яғының мәшһүр патриоттарының теләгәне бойомға ашырылыу. Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһында эшләгән йылдарҙа йәмәғәтселеккә, предприятие етәкселәренә таянып, байтаҡ изге эштәр эшләнде. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә: етәкселәрҙе иртә таңдан "тотмаһаң", башҡаса мөмкин түгел. Ҡараңғылы-яҡтылы мәлдә ҡайҙа ғына юлланмайым — юлымда Рамазан ағайҙы осратам. Инде нисәмә йылдар пенсияла булыуына ҡарамаҫтан, ил-йорт йомошо менән ҡайҙалыр китеп бара. Уңған кеше шул булыр: уянғас та — аяҡта, ти халыҡ мәҡәле.

Республика матбуғатында тарихыбыҙҙың теге йәки был биттәрен асып, ентекле ҡараш ташлаған, төрлө ваҡиғаларҙы яҡтыртҡан мәҡәләләр авторы, педагог һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе Рамазан Исмәғил улы Үтәғоловтың шәхесенә оло хөрмәт йөҙөнән был мәҡәләм. Ғүмер — даръя, аға ла аға, тиҙәр. Ләкин һәр даръяның сыҡҡан ере — инеше бар. Етмеш бишендә лә йәш егеттәр сәме, егәрлелеге менән янып йәшәгән уҙамандың, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһының, Рәсәй Фәндәр академияһының "Педагогия фәне өлкәһендәге новаторлығы өсөн" Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнеүсенең, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалерының, Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигының, Баймаҡ районының Батыр Вәлид исемендәге премияһы лауреатының, тыуған яҡты өйрәнеү нигеҙендә тыуған байтаҡ китаптар, очерктар, тарихи мәҡәләләр авторының, тиҫтә йылдар арауығында Сибай башҡорттары ҡоролтайы ағзаһының сыҡҡан инешенә — тыуған ауылына — бер байҡау яһамай тороп, Рамазан ағай характерындағы күп һыҙаттарҙы асыҡлап булмаҫ төҫлө.

## Ата-бабам баҡҡан ер —<br>кендек ҡаным тамған ер

Рамазан Исмәғил улы Үтәғолов Башҡортостандың Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында 1930 йылдың 15 ноябрендә донъяға килә. Сыңғыҙ — районның рухи арҡайымы, уның социаль-иктисади үҫешенә, мәҙәниәтен күтәреүгә ҙур өлөш индергән данлыҡлы ауылдарҙың береһе. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, композитор Хөсәйен Әхмәтов, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары лауреаты, бейеүсе Рәшиҙә Туйсина, "Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре", "Юғары уҡыу йорттары отличнигы", республиканың Әхмәтзәки Вәлиди Туған исемендәге халыҡ-ара премияһы лауреаты исемдәренә лайыҡ булған профессор Әнүәр Әсфәндиәровты, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты, талантлы шағир Рәйес Түләковты биргән ауыл ул. Эйе, үлән үҫкән ерендә үҫә, тиҙәр. Һикһәненсе тиҫтәне ҡыуғанында ла ил-йорт эштәренә башкөллө сумған Рамазан Исмәғил улына ҡарайһың да, уны тыуҙырған, үҫтергән, ҡанат ярҙырып осорған тупраҡҡа төбәлеберәк ҡарау теләге уяна.

"Сыңғыҙ ауылының тарихына бәйле халыҡ араһында төрлө риүәйәттәр йөрөй, — тип яҙа Рамазан Үтәғолов үҙенең "Сыңғыҙ — изге төйәк"

китабында (2003 й.). — Имеш, бик боронғо ваҡытта, әле тауҙар, таштар ереү булған саҡта, изге инәбеҙ Һауа, үҙенә йәшәү урыны эҙләп, Урал тауы буйлап сәйәхәткә сығып киткән. Ул ете юл сатында туҡтап, ял итергә булған. Аҙаҡ сәфәрен дауам иткән, ә инде ул ултырып ял иткән ташта эҙҙәре һаҡланып, уйылып ҡалған".

Әлбиттә, таш әлеге көнгә тиклем һаҡланмаған. Һауа ултырып ял иткән тау Фәрешҡуша (Фәрештә — хужа) тип аталһа ла, атеистик рух хөкөм һөргән саҡтарҙа был ташты шартлатып, һыйыр аҙбарына нигеҙ итеп һалалар. Боронораҡ был тауҙар шул тирәләге халыҡтың изге тәңреһе, ғибәҙәт ҡыла торған урындары булған. Ырым-юрау буйынса, пәйғәмбәрҙәр йөрөгән ерҙәр изге һаналған. Ауылдан күпләп үҙенсәлекле талант эйәләре, Рамазан ағай шикелле ил ағалары сығыуға, бәлки, шул да сәбәпселер?

Рамазан Исмәғил улы Үтәғоловтың шәхесенә, булмыш-асылына асыҡлыҡ индерә торған тышҡы сәбәптәр был ғына түгел: ауыл үҙе бик боронғо ҡаласыҡ ерлегендә ята. Сыңғыҙ ерендәге был ҡаласыҡ хаҡында, мәҫәлән, рус ғалимы һәм сәйәхәтсеһе Р.Г.Игнатьев былай тип яҙған: "Деревня Чингизово. В 4-х верстах от деревни на левом берегу реки Сакмара, в устье реки Аснаи (Әселе) находятся остатки вала окружностью 84 сажени с двумя воротами, по преданию, "ставка Чингизхана".

Әлбиттә, Сыңғыҙхандың бында булыу-булмауы бәхәсле, ләкин унда Сыңғыҙ (Монаш) ырыуы кешеләре йәшәгән. Археологтар тарафынан ауылдың зыяраты эргәһендә Алтын Урҙа дәүеренән ҡалған егерме ҡурған табылған. Тыуған ауылына, уның ер-һыуына ҡағылышлы бай тарих Үтәғоловты кесе йәштән ҡыҙыҡһындыра. Киске аштан һуң ҡарттар, берәйһенең өй алдына йыйылып, тарих төпкөлөндә ятҡан ыҙандарҙы байҡай, үткән ваҡиғаларға, ҡанлы көрәштәргә туҡтала. Берсә ярһып, берсә әсенеп һөйләнелгән был тәуарихтар зирәк малайҙың тәнен семерләтә, туҙанлы юлдар, шаңлы йылдар артында ҡалған шул серле биттәрҙе асып ҡарағыһы, хәҡиҡәттең яҙылғандар менән тап килеү-килмәүен үҙ күҙҙәре менән күргеһе килә. Эй был ғүмер тигәнең! Кемдәр генә килмәгән дә, кемдәр генә китмәгән! Күктә күпме йондоҙ сер һаҡлаһа, әҙәм балалары яҙмыштары ла шулай. Береһенең генә яҙмышынан япманы алһаң да, әллә күпме сер сиселә... Ана лаһа, уларҙың ауылының исеме генә нисә легендаға тоташа. Ә аймаҡ, түбә, ара исемдәре?.. Йылдар үтә торғас, инде оло кеше күҙлегенән сығып, ишеткән-күргәндәрен барлап, архивтарҙа бихисап китаптар, ҡулъяҙмалар туҙанын йотҡандан һуң, Үтәғолов аҡ ҡағыҙға түбәндәгеләрҙе теркәр: "Бөрйәндәр башҡа башҡорт ырыуҙары менән бергә 1557 йылда Мәскәү подданныйлығын ҡабул иткән. Ләкин уларҙың ҡушылыуы шартлы булған. Мәскәү дәүләте үҙенең бурысын үтәмәгән, шуға күрә бөрйәндәр Нуғай ханлығы эсендә һәм 1589 йылдан ҡаҙаҡтарҙың Бәләкәй жүс (йөҙ) берекмәһенә ҡушылып йәшәгән.

...Ләкин XVII быуат эсендә был ерҙәр урыҫ колонизаторҙары тарафынан баҫып алынған һәм үҙәктән урыҫ крәҫтиәндәре күсереп ултыртылған. ...Сыңғыҙ ауылы халҡы, был ерҙе ташлап, өс йүнәлештә күсенгән. XVI быуат аҙағында, урыҫтар 1586 йылда Өфө нығытмаһын төҙөгәндән һуң, Көньяҡ Уралда йәшәүсе башҡорттарға ҡарата,

бер яҡтан, Рәсәйҙең баҫымы көсәйһә, икенсе яҡтан, уларҙың көнсығыш сик буйы асыҡ булыуынан файҙаланып, ҡалмыҡ, һуңынан ҡаҙаҡтар Яйыҡ һәм Һаҡмар йылғалары араһындағы ерҙәргә үтеп ингән. Ҡалмыҡтар хатта, батша власының ике йөҙлө сәйәсәт алып барыуынан файҙаланып, аҫаба башҡорт ерҙәренә дәғүә иткән... Бына ошондай тарихтың киҫкенләшкән осоронда беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, халҡын, илен, ерен һаҡлап алып ҡалыу маҡсатында, XVII быуат башында үҙҙәренең боронғо төйәктәренә — Һаҡмар, Ирәндек буйына табан күсенгән. Ләкин был ерҙәргә кире күсенеүе һәм нығыныуы еңелдән булмаған. Һәр аҙым ер өсөн көсөргәнешле көрәш барған, дәғүәселәр күп булған. Шуға күрә лә Һаҡмар буйында урынлашҡан Монаш, Ямаш, Байһары ырыу түбәһенә ҡараған башҡорт ауылдары ул ваҡытта һаҡсыҡолғә вазифаһын башҡарған”.

Эйе, күп нәмә төйнәлә йәш үҫмер йөрәгенә, күп һорауҙар тыуа, әммә яҙмыш, йәшәлмәгән ғүмер үҙ биттәренә көтөлмәгән юлдар яҙа, әҙәм балаһын алдап, ул тыуғансы уҡ һыҙған һуҡмаҡтарҙан йөрөтә. Үтәғоловтар ғаиләһе, Баймаҡ ҡалаһына күскәнлектән, ауыр һуғыш мәле — мәктәп йылдары — Баймаҡ ҡалаһында үтә. Ил өҫтөнә төшкән афәт 12—13 йәшлектәр иңенә лә ята. Шуға күрә лә Рамазан Үтәғолов өсөн мәктәп йылдары сынығыу йылдарына әүерелә.

## Эш кешене кеше итер

Ысындан да, ниндәй генә талант эйәһенең тормошона күҙ һалма, уның башланғысында эш һөйөү ята. 1942 йылда аталары һуғышта вафат булған Үтәғоловтар ғаиләһендә эш берҙән-бер йәшәү сығанағы булып ҡала. Рамазан Исмәғил улы менән әңгәмәләшкән, һөйләшкән саҡтарҙа ул үҙенең хеҙмәт юлынан, 12 йәшенән мәктәпте ташлап, торфта эшләп йөрөргә мәжбүр булыуынан бер ниндәй ҙә батырлыҡ яһамай, ғәҙәти бер хәлгә ҡарағандай ғына һөйләй. Һөйләй тиеү ҙә, бәлки, дөрөҫ булмаҫ, һүҙ айҡан ғына әйтеп үтә. Ә мин ныҡышам.

— Нисек инде, һеҙҙең мәктәпкә йөрөмәүегеҙ менән бер кем дә ҡыҙыҡһынманымы?

— Ваҡыты шулай ине бит. Ҡырҡ икенсе йылдың ноябрь айында табып алып, парта артына ултырттылар. Әммә мәктәптән сыҡҡанды көтөп торалар. Сумканы ташлайбыҙ ҙа эшкә барабыҙ. Сәғәт өстә сығып китәбеҙ, төн еткереп ҡайтабыҙ. Шулай уҡыныҡ. Башҡорт синыфында биш кеше урта мәктәпте тамамлай алдыҡ.

Торф әҙерләү эшендәге ауырлыҡтар хаҡында Рамазан ағай һөйләмәне. Мәгәр ул эштең үҙәккә үтерлек һыуыҡта, һыу кисеп, ниндәй ғазаптар аша башҡарылғанын башҡалар ауыҙынан ишетеп беләм. Ошондай шарттарҙа эшләп, урта белем алыу — үҙе ҡаһарманлыҡ. Һуғыш йылдарындағы уның хеҙмәте ”Хеҙмәт даны” миҙалы менән баһаланған. Ул был ҡаһарманлыҡты 12 йәшендә яһаған!

Тормош бер урында тормай. Илгә белемле кешеләр кәрәк. Һуғыш йылдарында бөтә нәмә фронт өсөн эшләй, шуға күрә лә уҡытыусылар етешмәй. Урта мәктәпте тамамлаған егетте ул саҡтағы Баймаҡ мәғариф бүлеге мөдире Чанышев саҡыртып ала һәм Юлалы мәктәбенә

уҡытыусы итеп ебәрә. Шулай итеп, башҡортса уҡып белем алған егет рус синыфтарын уҡыта башлай.

Эшләһәң, эш ҡарышмай. Уҡытыу эшендә сирҡаныс алған Үтәғоловҡа был һөнәр оҡшай төшә. Артабан белемен камиллаштырып, дипломлы уҡытыусы булыу теләге тыуа һәм ул Магнитогорск ҡалаһындағы педагогия институтының тарих факультетына уҡырға инә.

Өйҙән ярҙам көтөп булмай, Үтәғолов стипендиянан ҡалмаҫҡа тырыша, саҡ ҡына бушаһа, вокзалға йөк бушатырға бара. Эш менән дәресте ҡатар алып барыуға күнеккән егет институтты уңышлы тамамлай. Ә инде буласаҡ белгестәрҙе эшкә бүлә башлағас, ул бер һүҙ генә әйтә: "Башҡортостанға!"

1953 йыл. Рамазан Үтәғолов тарих уҡытыусыһы булып Баймаҡ ҡалаһының 2-се мәктәбендә хеҙмәт юлын башлай. Үткер, аҡыллы, күҙәтеүсән һәм зирәк йәш уҡытыусыны тиҙ үк күреп алалар, 1955 йылда инде уны ҡаланың иң ҙур 1-се мәктәбенә уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары итеп күсерәләр. Был заманда илдә сәйәсәт шайтан килен күсергәндәй — ҡойондай — ҡоторона. Һуғыш һалған яралар әле уңалып та бөтмәгән, йәнә сәйәси репрессиялар башлана, унан күп тә үтмәй Сталиндың шәхес культы фашлана, сәйәси тотҡондарға амнистия иғлан ителә, Берияның ҡоротҡослоҡ эше ҡалҡып сыға... Тарих уҡытыусыһы өсөн уйланыр, баш ватыр нәмә күп, ләкин... заманы ул түгел. Күңелең һиҙенеп тә, бер эш ҡыйрата алмайһың. Иң мөһиме — йәш быуынды иғтибар үҙәгенән ысҡындырмаҫҡа. Ул йылдарҙа Үтәғолов мәктәптәрҙә күп йөрөй, педагогик коллективтарға ихлас ярҙамлаша, үҙе лә тәжрибә туплай.

1960 йылда Р.И.Үтәғоловҡа үтә лә яуаплы бурыс йөкмәтелә — уны эреләтелгән Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Был вазифала эшләгәндә ул мәктәптәрҙең базаһын нығытыуға ҙур иғтибар бирә. Тырышлыҡ бушҡа китмәй: 1963 йылда район мәктәптәренең 60 проценттан ашыуы яңы биналарға күсә. Райондың башланғыс мәктәп уҡыусылары республикала тәүгеләрҙән булып бер сменала уҡый башлай. Урта мәктәпте тамамлаусылар араһында юғары уҡыу йорттарына инеүселәр һаны бермә-бер арта.

1963 йылда Р.И.Үтәғолов Мәскәүҙә Бөтә Союз педагогик уҡыуҙарында һөйләгән телмәрендә балаларҙы бер синыфтан икенсеһенә мотлаҡ күсереп, икенсе йылға ултыртып ҡалдырмау тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Хәтеремдә, уҡытыу эшендәге был үҙгәреш, ысынлап та, ул ваҡыт өсөн бик ҙур яңылыҡ ине. Ул саҡта бит һәр синыфта тиерлек берәр, уҙа барһа, икешәр "йәшәмеш" ултырыр ине. Беҙ уларға "атай" йә "әсәй" тип ҡушамат тағабыҙ. Дүртәр-бишәр йыл бер синыфта ойоп ултырған бала үҙ-үҙенә бикләнә, йәиһә, бөтәһенә ҡул һелтәп, тәртипһеҙгә әүерелә. Ә бит рус теленән күсерелмәгән бала, математиканан мәсьәләләрҙе сәтләүек ярғандай сисә, физиканан, химиянан лаборатор эштәрҙе һуш китерлек тиҙлектә эшләп ҡуйыр ине.

Үтәғолов район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире булып эшләгән йылдарҙа урындағы кешеләрҙән кадрҙар әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә. Юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр өсөн ҡалала курстар һәм ҡабул итеү имтихандары ойоштороla. Шул осорҙа Түбә мәктәбендә X, XI кластарҙы тамамлаған йәштәштәремдең бөтәһе тиерлек ана шул курстарҙы

тамамлап, ситтән тороп юғары уҡыу йорттарына инеп, уҡытыусы булып эшләп китте.

Р.И.Үтәғолов етәкләгән Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлеге яңы мәктәптәр төҙөү буйынса республикала еңеүсе булып, ике тапҡыр күсмә Ҡыҙыл Байраҡ менән бүләкләнә. 1967 йылда күренекле мәғариф хеҙмәткәре, тәжрибәле педагог һәм ойоштороусы Р.И.Үтәғолов Сибай ҡалаһына күсә. Башта уны ҡала партия комитетының сәйәси мәғариф кабинеты мөдире итеп ҡуялар, әммә уны йәштән эшләгән эше нығыраҡ тарта: 1970 йылда ул Сибай башҡорт мәктәп-интернатына директор булып килә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул эшлекле коллектив тупларға өлгәшә һәм ҡолас йәйеп эшкә тотона. Шунан уны ярҙамсы мәктәпкә директор итеп күсерәләр. Үтәғоловтың Сибай ҡалаһы мәктәптәрендәге эше шулай уҡ хөкүмәт тарафынан юғары баһалана: 1973 йылда уға Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исем бирелә.

Эйе, Рамазан Исмәғил улы үҙенең хеҙмәт юлын лайыҡлы үтә. Ә бына тарихсы булмышы менән хеҙмәт карьераһы нисек бер йөрәккә һыйышып йәшәй алған икән? Китапта яҙылған тарихтан ысын тарих күпкә айырыла ине бит. Тоталитар режим ҡыҫаларына һыйышмай, үрәпсегән саҡтары уның да булғандыр. Уйҙарымды һорау итеп биргәс, Рамазан ағай бер ни ҡәҙәр өндәшмәй ултырҙы. Әлбиттә, ул ғына түгел, мин дә, йәшерәк булһам да, шул осор кешеһе. Бар яҡшыны яманға саймағанда ла, барыбер уйланырлыҡ урын күп. Мәҫәлән, уның шул уҡ тарих уҡытыусыһы булыуы?..

— Алты аҙым алға кит, алтмыш тапҡыр артыңа ҡара, ти мәҡәл, — тип һүҙен дауам итте шунан Рамазан ағай. — Эшләгән йылдарҙа тарих менән ныҡлап шөғөлләнергә ваҡыт та булманы. Ул заманда тарих уҡытыу мәктәп программаһы сигендә генә алып барылды. Шулай ҙа, уңайын сығарып, күп нәмәнең дөрөҫлөккә тап килмәүен әйтеп ҡуйғылай инем. Тәүге ҡыҙыҡһыныуым Рәсәйҙең I, II саҡырылыш Думаһы депутаты, ахун дәрәжәһендәге кеше Шаһишәрип Мәтиновтан башланды. Аҙаҡ минең бөтә иғтибарымды биләгән репрессия темаһы ла шунан башланды. Уның улы менән осрашыу теләге тыуҙы. ”Минең менән осрашҡанығыҙҙы белһәләр, һеҙгә һүҙ тейер”, — тине улы. Машина менән Ирәндеккә сығып һөйләштек. Күргән-кисергәндәрен бик әсенеп һөйләне. Мәтинов шағир Дәрдмән менән бик дуҫ булған, Туҡай менән осрашҡан...

Алтылағы — алтмышта. Рамазан Үтәғолов үҙенең хеҙмәт йылдарында күңелендә ниҙәр кисереп йәшәгәнен бик асылып һөйләмәһә лә, ептең осон сығара биреп ҡуйҙы. ”Сыңғыҙ — изге төйәк”, ”Тропою знаний”, ”Звезды Ирендыка”, ”Баймакский край” исемле донъя күргән китаптары, әле яҙылып бөткән, нәшер итеүҙе көткән башҡа китаптары, ”Ғазаплы юлдарҙа” (”Ватандаш”, 1997, №2) кеүек Баймаҡтағы сәйәси репрессиялар хаҡындағы мәҡәләләре бөгөн-иртән уйланылып яҙылған хеҙмәттәр түгелдер. ”Ғазаплы юлдарҙа” мәҡәләһендә Хажиәхмәт Унасов һәм унасовсылар хәрәкәтенә бәйле ваҡиғаларҙы, Унасов етәкселегендәге халыҡ хәрәкәтенең асылын асып бирә; мәҡәләнең ”Баймаҡта — солтанғәлиевщина” тигән бүлегендә, асылда, был хәрәкәттең дә ”өҫтән” уйлап сығарылған уйҙырма булғанын, ғәмәлдә

унда бер ниндәй контрреволюцион эш алып барылмауы хаҡында һөйләнелә; ”Татлыбаевщина”: дөрөҫлөк һәм уйҙырмалар” бүлегендә шулай уҡ Татлыбаев крәҫтиәндәрҙе колхозға инмәҫкә ҡоторттҡан, батрактарҙы үҙҙәренең йәйләүҙәренә китергә өндәгән, 1933 йылда Татлыбаев тарафынан ҡоралды ихтилал әҙерләнгән тигән уйҙырмаларҙың, ошо арҡала 70 кешенең ҡулға алыныуының сәбәптәрен асыҡлай. Мәҡәләлә шулай уҡ ”Ҡунаҡбаевщина” һәм башҡа шундай Баймаҡ ерлегендә уның халҡына ҡара көстәр тарафынан тағылған ярлыҡтарҙың буш һүҙ булыуы, яңынан-яңы репрессиялар өсөн ҡорбан эҙләү саралары булғанын асып һала автор.

Был юлдарҙы уҡыған бәғзе берәүҙә, бәлки: ”Үтәғоловты шул заман кеше иткән, уҡытҡан әле!” — тигән фекер тыуыр. Әңгәмәләшкән саҡта беҙ был темаға ла туҡталдыҡ. ”Тарихи дөрөҫлөккә хыянат иткем килмәй, — тине ул, ғәҙәттәге тыныслығын һаҡлап. — Үҙем дә бит шул хәҡиҡәтте халыҡ белһен, аҡтан ҡараны айырһын, тип тырышам. Үткән замандың яҡшы яҡтары ла аҙ булманы: уларҙы бөтөнләй инҡар итеү ҙә — шул уҡ тарихи дөрөҫлөккә хыянат итеү. Эйе, мин бушлай белем алдым, бушлай ике тапҡыр ҡатмарлы операция үткәрҙем, былар өсөн мин, әлбиттә, үткән заманға бурыслы”. Хәҙерге байҙарға ҡарата ла, мәҫәлән, Рамазан Исмәғил улының мөнәсәбәте асыҡ: ”Мин уларҙы яратмайым, — ти ул. — Ана, Рәмиевтар ҙа бай булған. Күпме мәсет, мәҙрәсә асҡандар, тимер юлдар һалдырғандар, гәзит-журналдар нәшер иткәндәр, ә былар тик үҙ кеҫәләрен генә ҡайғырта”.

Рамазан Исмәғил улына ҡарайым да, йәнә уйлана төшәм: бер йөрәккә ике, улай ғына ла түгел, өс төрлө идеология, улар алып килгән, халыҡ яҙмышында тәрән бураҙналар һалдырған ваҡиғалар һыйған. Үҙе тыуып-үҫкән Сыңғыҙ ауылы ваҡыт ҡатламдары аҫтында ятып ҡалған күпме тарих һаҡлаһа, Рамазан ағай күңеле лә шулай.

Әгәр Америка профессоры Хафиз Малик инглиз телендә сыҡҡан журналда: ”Башҡорттарҙың 1557 йылға тиклемге тарихына туҡталып, Үтәғолов Силәбе ерҙәрен, ”ул беҙҙең ер, Арҡайым — беҙҙең цивилизацияның бишеге”, тип сығыш яһаны Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында”, — тип яҙа икән, был ана шул уҙаман күңелендәге тарихи дөрөҫлөктөң бөгөнгө ысынбарлыҡ менән һыйыша алмауынан килеп сыҡҡан әрнеүҙәрҙер, моғайын.

Күп серҙәр һаҡлай шул тыуған тупраҡ. Үткән быуаттарҙың ауаздарын беҙ таштарҙан, уба, ҡәлғә харабаларынан эҙләйбеҙ. Хәҡиҡәт төпкә йәшеренгән. Уны бөтә Ер шарын әйләндереп ҡарап ҡына ла табып, осона сығырлыҡ түгелдер. Рамазан Исмәғил улы Үтәғоловҡа ла, бәлки, бөтә дөрөҫлөктө асып һалыу хәленән килмәҫ. Ләкин үҙ ғүмерендә ул байтаҡ хәҡиҡәтте асты, исеменә ҡара мөһөр ҡушылған байтаҡ әруахтарыбыҙға өр-яңы ҡараш ташларға мәжбүр итте. Рамазан ағай кеүек кешеләр күп түгел, әммә ундайҙарҙың булыуы яҡшы. Кешелек тәбиғәтенә ҡылынған хилафлыҡтарҙы ҡасан да булһа өҫкә ҡалҡытыр ошондай кешеләр булыры хаҡында иҫкәртеүҙәре, ышаныс тыуҙырыуы менән яҡшы.